# BAŞKURT ŞECERELERİ

# БАШКОРТ ШӘЖӘРӘЛӘРЕ

TÜRKSOY

مفتاح الدین کمال الدین جمال الدین حسن الدین فخر الدین

منصور عبد الغفار عبد النجر

محمد جان محمد ظاهر عبد الولی یحیی

...ک شعرای شیغماه لنار   بدرجه لنک اسیکی بیلنار

...اه باریب اروغ لرنک بیلاوی مجبور غان ... بولدی

...قالمی یرلدی ... شعرنه کتنکه بوبار ...

...کلع طالب آلملاغیمو باقرلیه روح تینیش ربلیع تینیشغه ...

...سبینی تحقیق بولونغ پادشاه الدیع ... لری

...وف   دیب   رستیباب   سید کمال ...

...شاه بیلدرکن شیب دیب   بیبیس کمال ... ایل

بیلنس دیب

...بجواریخ یل ... طعو بولب ... غان ... کاتب ...

...ا ینشائی ... بیشسعف




روسترتان نینگ بیک باو کیتاری    تماسان نینگ ش

قبچاق نینگ مشهدی قاری قعدجاقا کیتاری ویلان با

قایو بیر کونی مشتدره ایدیب اوکاتب بولب آلی

معلوم تورلیک بیماغنین ترک تورلیکلیدین تورلیک

تاچ حساب ایدله دور    روشیب

بری قرون لری قوی عسکر الدوی

ایندرت بابی عف

آتهاتور آرستپاه

یودلینیز کوبردم

محرم ١٢

تمانعوی تمالنیک صعفلینیگ      باینش

عیلی تنکیلد




...نک شعرای شیخماه نثار     پدر رجان نینک اسمی بی...

...ملان ماله اروغ لرنینک بیلان محمد رضا خان مولوی بولدی

...آلی ... دیر ... شعورنه کتابنی یازمه

...تولکی طالب آلماغه پیلیه ... تینک ... تینه جم ...

...سببی تحقیق ... پادشاه ... مینکاه ...

...وف دیب     رستیپاب سید کمال...

...بیلار ... شیب دیب     بیس کماتب میکایل

بیلانس دیب

...۱۶ ... بیل ... ... ... کاتب...

...بایمای ... بیلسه ...

TÜRKSOY

Türk Kültür ve Sanatları Ortak Yönetımı

Yayın No: 32

# Başkurt Şecereleri

# Башҡорт шәжәрәләре

Ankara, 2009

www.turksoy.org

**Uluslararası TÜRKSOY Teşkilatı**

**Rusya Federasyonu Başkurdistan Cumhuriyeti Kültür ve Ulusal Siyaset Bakanlığı**

**Eseri Yayına Hazırlayanlar:**

**Başkurtça Bölümü:**
Doç. Dr. Minlegali Nadergulov

**Türkiye Türkçesi:**
Ahat Salihov

**Türkçe Düzelti:**
Farma Ertürk

**Kitabı Derleyen ve Yayına Hazırlayan:**
Ahat Salihov

**İnceleyen:**
Prof. Dr. Firdevis Hisamitdinova

**Grafik Tasarım:**
Yunus Emre Yüce

**Халыҡ-ара ТЮРКСОЙ ойошмаһы**

**Рәсәй Федерацияһы Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы**

**Китапты баҫмаға әҙерләнеләр:**

**Башҡортса өлөшө:**
Филология фәндәре кандидаты
Миңлеғәли Нәҙерғолов

**Төрөксәгә тәржемә:**
Тарих фәндәре кандидаты
Әхәт Сәлихов

**Төрөксә тексты корректоры:**
Фатма Эртюрк

**Төҙөүсе һәм баҫмаға әҙерләүсе:**
Тарих фәндәре кандидаты
Әхәт Сәлихов

**Рецензенты:**
филология фәндәре докторы
Фирҙәүес Хисамитдинова

**Верскалаусы:**
Юнус Эмре Юдже

www.turksoy.org
turksoy@turksoy.org

**Kapak Tasarımı:**
Ahat Salihov - Yunus Emre Yüce

© Minlegali Nadergulov, 2009
© Ahat Salihov, 2009
© TÜRKSOY, 2009

ISBN : 978-975-7213-29-1

**Baskı:**
Ankamat Matbaacılık Sanayi Limited Şirketi
30. Cadde 538. Sok. No. 60 İvedik Organize Sanayi Bölgesi - ANKARA
Telefon: (0.312) 394 54 94 - Faks: (0.312) 394 54 96

# İçindekiler – Йөкмәткеhe


Değerli Okurlar! (TÜRKSOY Genel Müdürü Düsen Kaseinov'un Sunuşu) – Ҡәҙерле уҡыусылар! (ТЮРКСОЙ Генераль директоры Дүсән Касеиновтың баш һүҙе) 5

Yeni Kitap Kutlu Olsun! (Başkurdistan Başbakan Yardımcısı, Kültür ve Ulusal Siyaset Bakanı İldus İlişev'in Sunuşu) – Ҡотло булһын яңы китап! (Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбасары, Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешевтың баш һүҙе) 7

Değerli Yâdigarlar (Minligali Nedergulov) – Ҡиммәтле ҡомартҡылар (Миңлеғәли Нәҙерғолов) 8

Başkurt Şecereleri Hakkında (Ahat Salihov) – Башҡорт шәжәрәләре хаҡында (Әхәт Сәлихов) 10

**Eski Şecereler – Боронғо шәжәрәләр** 25

Tamyan İli Başkurtları Şeceresi 27

Kara Tabın (Irekti) Uruğunun Şeceresi 34

Orijinal Nüshadan Yapılmış Kopyadan (Üsergen, Bürcen, Kıpçak Ve Tamyan Urukları Tarihinden) 48

Baylar İli Başkurtları Şeceresi 50

Merkit-Min İlçesi Başkurtları Şeceresi 61

Üsergen Uruğu Şeceresi 74

**Боронғо шәжәрәләр – Eski Şecereler** 81

Тамъян иләүе башҡорттары шәжәрәһе 82

Ҡара табын (ирәкте) ырыуының шиғри шәжәрәһе 91

Подлинныйның копиясындан [үҫәргән, бөрйән, ҡыпсаҡ һәм тамъян ырыуҙары тарихынан] 107

Байлар иләүе башҡорттары шәжәрәһе 110

Меркет-мең волосы башҡорттары шәжәрәһе 122

Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе 135

**Yeni Şecereler – Хәҙерге шәжәрәләр** 143

**Şema Şeklindeki Şecereler – Схема рәүешендәге шәжәрәләр**

Başkurdistan Cumhurbaşkanı Murtaza Rahimov'un Şeceresi 145

Башҡортостандың Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың нәҫел шәжәрәһе 146

Meşhur Başkurt Tarihçisi Ord. Prof. Dr. Ahmet Zeki Velidi Togan'ın Şeceresi 147

Мәшһүр башҡорт тарихсыһы профессор, доктор Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың шәжәрәһе 148

Kuvakan Uruğu Şerip Köyü Başkurtlarından Şeyh Zeynulla İşan Resulev'in Şeceresi 149

Ҡыуаҡан ырыуы Шәрип ауылы башҡорто шәйех Зәйнулла ишан Рәсүлевтың нәҫел шәжәрәһе 150
Başkurdistan Halk Şairi Mustay Kerim'in Şeceresi 151
Башҡортостандың Халыҡ шағиры Мостай Кәримдең нәҫел шәжәрәһе 152
Başkurdistan Halk Yazarı Ahiyar Hakimov'un Şeceresi 153
Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәкимовтың нәҫел шәжәрәһе 154
İç Yılan Uruğu Başkurtlarından Başkurdistan Halk Şairi Nazar Necmi'nin Şeceresi 155
Эске Йылан ырыуы башҡортто Башҡортостандың Халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең шәжәрәһе 156

**Liste Şeklindeki Şecere – Исемлек рәүешендәге шәжәрә**

Meşhur Başkurt Tarihçisi Ord. Prof. Dr. Ahmet Zeki Velidi Togan'ın Şeceresi – Мәшһүр башҡорт тарихсыһы профессор, доктор Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың шәжәрәһе 157

**Eski Şecerelerin Kopyaları – Боронғо шәжәрәләрҙең копиялары** 173
Tamyan İli Başkurtları Şeceresi – Тамъян иләүе башҡорттары шәжәрәһе 174
Kara Tabın (Irekti) Uruğunun Şeceresi – Ҡара табын (ирәкте) ырыуының шәжәрәһе 176
Orijinal Nüshadan Yapılmış Kopyadan (Üsergen, Bürcen, Kıpçak Ve Tamyan Urukları Tarihinden) – Подлинноййың копияһынан (үҫәргән, бөрйән, ҡыпсаҡ һәм тамъян ырыуҙары тарихынан) 180
Baylar İli Başkurtları Şeceresi – Байлар иләүе башҡорттары шәжәрәһе 182
Merkit-Min İlçesi Başkurtları Şeceresi – Меркет-мең волосы башҡорттары шәжәрәһе 183
Şecereler İncelemelerinde Bulunan Başkurt Bilim Adamlarından Rizaitdin Fahretdinov – Шәжәрәләрҙе тикшереүсе башҡорт ғалимы Ризаитдин Фәхретдинов 184
Şecereler İncelemelerinde Bulunan Başkurt Bilim Adamlarından Muhametselim Ümitbayev – шәжәрәләрҙе тикшереүсе башҡорт ғалимы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев 185

**Özet – Һығымта** 186

## Değerli okurlar!

Türk halklarında şecere, soy ağacını yapma geleneği çok eski devirlerden gelmektedir. Bunları açıkça Orhun-Yenisey yazıtlarından da görebiliriz. Şecerelerden sadece ayrı boyların, urukların, halkların değil, tüm Türk dünyasının tarihini de öğrenmek mümkündür. Şecereler Türklerin kökünün, kan kardeşliklerinin, akrabalık bağlarının açıklanması için çok değerli bir kaynaktır. Başkurt şecerelerinin bazı örneklerini içine alan bu kitap Başkurtların tarihi, etnik köklerini araştıranlar için çok önemli olacaktır. Atalarını, kardeşlerini, tarihini ve kültürünü unutmayan halkın bugünü güvenli, geleceği ümitlidir. Özgün ve özenle hazırlanan bu eseri tüm Türk dünyası okurlarının sevinçle ve sıcaklıkla kabul edeceklerine inanıyorum.

Başkurt Şecerelerini Türk Dünyasına tanıtan bu eseri yayınlatmayı öneren Başkurdistan Cumhuriyeti Kültür ve Ulusal Siyaset Bakanı İldus İlişev'e ve Rusya Bilimler Akademisi Ufa Bilim Merkezi Tarih, Dil ve Edebiyat Enstitüsü müdürü Prof. Dr. Firdevis Hisamitdinova'ya, kitabı yayına hazırlayan Minligali Nadergulov ile Ahat Salihov'a ve tüm emeği geçenlere teşekkürlerimi sunarım.

**Düsen Kaseinov**
**Uluslararası TÜRKSOY Teşkilatı**
**Genel Müdürü**

## Ҡәҙерле уҡыусылар!

Төрки халыҡтарында шәжәрә - нәҫел-нәсәп сылсыләһе төҙөү бик борондан килә. Быны Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмалары ла асыҡ дәлилләп тора. Шәжәрәләрҙә айырым араның, ырыуҙың, халыҡтың ғына түгел, дөйөм төрки донъяһының да тарихы ята. Улар төркиҙәрҙең генетик тамырҙарын, ҡан-ҡәрҙәшлек, туғанлыҡ мөнәсәббәтәрен асыҡлауҙа һәм өйрәнеүҙә ҡиммәтле сығанаҡ булып хеҙмәт итә ала. Башҡорт шәжәрәләренең айырым өлгөләренән тупланған был йыйынтыҡтың халыҡ тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн дә, генетик бәйләнештәрҙе юллаусылар өсөн дә әһәмиәте ҙур. Ата-бабаларын, ҡан-ҡәрҙәштәрен онотмаған халыҡтың бөгөнгөһө ышаныслы, киләсәге өмөтлө. Китаптың бөтә төрки донъяһында яратып, йылы ҡабул ителеренә һис ниндәй шик юҡ.

Башҡорт шәжәрәләрен төрки донъяһына таныттыуҙы тәҡдим иткән Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илишевҡа һәм Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты мөдире Фирҙәүес Хисаметдиноваға, ошо китапты баҫыуға әҙерләгән филология фәндәре кандидаты Миңлеғәли Нәҙерғоловҡа, тарих фәндәре кандидаты Әхәт Сәлиховҡа һәм башҡа ярҙам күрһәтеүселәргә рәхмәтемде белдерәм.

**Дүсән Касеинов**
**Халыҡ-ара ТЮРКСОЙ ойошмаһы**
**Генераль директоры**



**XI. asırda Mahmut Kaşgarlı tarafından çizilmiş ilk Türk Dünyası haritası. Burada Başkurtların yaşadığı topraklar da gösterilmiştir.**

**XI быуатта Мәхмүт Ҡашғари тарафынан эшләнгән тәүге төрки донъяһы картаһы. Бында башҡорттар йәшәгән ер ҙә күрһәтелгән.**

## Yeni kitap kutlu olsun!

Son yıllarda Başkurdistan Cumhuriyeti Hükümetinin kararlarına uygun olarak cumhuriyetimizin şehir ve köylerinde büyük şenliklerle Şecere Bayramları yapılmaktadır. Bu bayramın esas amacı kimliği silinmiş halkı kimliğine kavuşturmak, genç kuşaklara tarihi anlatmak, ata-babalara saygı duygusunu aşılamak, neslini, akrabalarını tanımaya ve onlara değer vermeyi öğretmektir. Başkurtlarda şecere yapma geleneği asırlar öncesindeki zamanlardan gelmektedir. Eski zamanlarda insanların yedi ceddini bilmesi mutlak gerekli sayılmıştır. Bazı dönemlerde bu önemli gelenek unutulmaya yüz tuttu. Bilim adamlarımız tarafından hazırlanan ve uluslararası TÜRKSOY teşkilatı tarafından Başkurtça ve Türkçe yayınlanan bu kitap Başkurt şecerelerini dünya çapında tanıtacak ve şecere geleneğinin halkımız arasında ne kadar güçlü ve bir şekilde yaygın olduğunu gösterecektir.

Bu kitabın yayınlanmasını desteklediği için Rusya Bilimler Akademisi Ufa Bilim Merkezi Tarih, Dil ve Edebiyat Enstitüsü Müdürü Prof. Dr. Firdevis Hisamitdinova'ya, kitabı hazırlayan Minlegali Nadergulov ve Ahat Salihov'a, kitabın Türkçe elyazısını okuyan ve önemli düzeltmelerde bulunan Prof. Dr. İsenbike Togan'a, ve Başkurt Şecerelerinin dünya çapında tanınmasına fırsat yaratan Uluslararası TÜRKSOY teşkilatı Genel Müdürlüğüne şükranlarımı sunarım.

*Başkurt Şecereleri* kitabı kutlu olsun!

**İldus İlişev**
**Başkurdistan Cumhuriyeti Başbakan Yrd.**
**Kültür ve Ulusal Siyaset Bakanı**

## Ҡотло булһын яңы китап!

Һуңғы йылдарҙа, хөкүмәт ҡарарына ярашлы, республикабыҙ ауылдарында һәм ҡалаларында шаулап-гөрләп шәжәрә байрамдары уҙа. Уларҙың төп маҡсаты – халыҡты манҡортлоҡтан ҡотҡарыу, йәш быуында тарихҡа, ата-бабалар мираҫына хөрмәт тойғоһо тәрбиәләү, нәҫеленде, туғандарыңды белергә һәм ҡәҙерләргә өйрәтеү. Шәжәрә төҙөү башҡорт халҡында сал быуаттарҙан килә. Элек-электән ете быуын ата-олатаңды белеү һәр кем өсөн мотлаҡ һаналған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер осорҙа был изге йола тамам һүнде, юҡҡа сығыу сигенә етте. Ғалимдарыбыҙ тарафынан әҙерләнеп, халыҡ-ара ТЮРКСОЙ ойошмаһы ярҙамында башҡорт һәм төрөк телдәрендә баҫыласаҡ был китап айырым башҡорт шәжәрәләрен донъя кимәлендә танытасаҡ, шәжәрә яҙыу традицияһының халҡыбыҙҙа ни тиклем көслө һәм бай булғанлығын күрһәтәсәк.

Был китапты баҫтырырға ярҙам иткәне өсөн Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни Үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры профессор, филология фәндәре докторы Фирҙәүес Хисамитдиноваға, китапты әҙерләүсе Миңлеғәли Нәҙерғолов һәм Әхәт Сәлиховҡа, китаптың төрөксә ҡулъяҙмаһын уҡыған һәм мөһим төҙәтеүҙәрҙәр эшләгән профессор, доктор Иҫәнбикә Туғанға, ғөмүмән халыҡ-ара ТЮРКСОЙ ойошмаһы генераль дирекцияһына оло рәхмәтемде белдерәм.

Төклө аяғың менән, "Башҡорт шәжәрәләре"!

**Илдус Илешев**
**Башҡортостан Республикаһы**
**Премьер-министр урынбаҫары,**
**Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры**

## Değerli Yadigârlar

Geçmiş asırlardan günümüze ulaşan Başkurt el yazma kaynakları arasında şecereler önemli yer tutmaktadır. Bu gün Rusya Federasyonu'nun çeşitli arşiv ve kütüphanelerinde 150'den fazla soy ağacı belgeleri bulunmaktadır. Yine şecereler insanların özel kolleksiyonlarında da muhafaza edilmektedir. Şecerelerin birkaç çeşidi vardır. Biri sadece isimler zincirinden oluşur diğeri ise, adlar zinciri ve kısa metinlerden oluşur. Üçüncü şekli ise, tamamen metinden oluşur. Eski şecerelerde boyların yaşadığı topraklar da anlatılır.

Akademisyen R.G. Kuzeyev'e göre, Başkurt şecereleri XV-XVI. asırlarda kaydedilmeye başlamıştır (*Başkirskiye Şecere*/ Sost., Per. Tekstov i Komment. R.G. Kuzeeva.-Ufa: Başknigoizdat: 1960, S.9). Karagay-Kıpçak, Yurmatı, Min (Bin) boylarının şecereleri bu türdendir. Malesef, onların asıl nüshaları korunmamıştır. Günümüze kadar sadece onların XIX-XX. asrın başlarında yapılmış kopyaları ulaşmıştır.

Çok eski zamanlarda şecereleri şiir şeklinde yazma geleneği de vardı. Örneğin, Üsergen ve İrekti boylarının şecereleri şiirle anlatılmıştır.

Başkurt şecerelerini öğrenim ve yayınlama XIX. asrın sonlarında başlamıştır. Tanınmış bilim adamı Muhametselim Ümitbayev 1897 yılında *Yadigâr* adlı kitabında Kisi (Küçük) Tabın, Yumran Tabın ve Eyli boyları şecerelerinden parçalar neşretmiştir. 1913-1914 yıllarında Şura der-

## Ҡиммәтле ҡомартҡылар

Үткән быуаттарҙан беҙҙең көндәргәсә килеп еткән башҡорт яҙма сығанаҡтары араһында шәжәрәләр айырым урын тота. Әлеге ваҡытта төрлө архивтарҙа һәм китапхана фондтарында 150-нән артыҡ генеалогик яҙма һаҡланғанлығы мәғлүм, улар шулай уҡ шәхси коллекцияларҙа ла осрай. Шәжәрәләрҙең төрлө төрҙәре бар; береүҙәре тик исемдәр теҙмәһенән генә тора, икенселәрендә исемдәр сылбыры ҡыҫҡа-ҡыҫҡа текст менән аралашып килә, өсөнсөләре иһә тотошлайы менән хикәйәләүгә ҡоролған. Боронғоларында, ғәҙәттә, ырыуҙың биләп йәшәгән ерҙәре лә күрһәтелер булған.

Академик Р. Ғ. Кузеев билдәләүенсә, башҡорт шәжәрәләре XV-XVI быуаттарҙа уҡ ҡағыҙға теркәлә башлаған (ҡара: Башкирские шежере / Сост., пер. текстов и коммент. Р. Г. Кузеева. – Уфа: Башкнигоиздат, 1960, 9-сы бит). Ундайҙарға Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Юрматы, Мең ырыуҙары шәжәрәләре ҡарай. Ләкин улар төп нөсхәлә һаҡланып ҡалмаған, беҙҙең заманға XIX - XX быуат башы күсермәләрендә килеп еткән.

Борон-борондан башҡорттарҙа ырыу тарихын теҙмә, йәғни шиғри, рәүештә яҙыу ғәҙәте лә йәшәгән. Үҫәргән һәм Ирәкте ырыуы шәжәрәләре – быға асыҡ дәлил.

Башҡорт шәжәрәләрен өйрәнеү һәм баҫтырыу эше XIX быуат аҙағында уҡ башлана. Күренекле мәғрифәтсе ғалим Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев үҙенең 1897 йылда нәшер ителгән "Ядкәр" исемле китабына Кесе Табын, Йомран Табын

gisinde Eyli ve Kırgız uruklarına ait soy ağacından parçalar, 1927 yılında *Başkurt Aymağı* dergisinin 4. sayısında Sagit Miras tarafından Kıpçak, Yurmatı ve Kara-Tabın (İrekti) uruklarının şecereleri yayınlanmıştır.

Başkurt şecereleri ayrı kitap olarak ilk defa 1960 yılında tarihçi ve etnograf R.G. Kuzeev tarafından yayınlanmıştır. Başkurt Şecereleri adlı bu kitap bilim adamları tarafından sıcak ve olumlu karşılamış, ve bu eserin boyların tarihlerini öğrenmede büyük katkısı olmuştur.

XIX-XX. asrın başlarında istinsah edilmiş 27 şecereyi içeren diğer bir derleme kitabı, 2002 yılında R.M. Bulgakov ve M.N. Nedergulov tarafından neşredilmiştir.

Okurların dikkatine sunulan bu üçüncü kitapta ise eski ve çağdaş şecereler yer almaktadır. Eski dönemlere ait şecereler XIX-XX. asrın başlarında istinsah edilmiş kopyalarından alınmıştır. Yeni şecereler ise, Rusya Bilimler Akademisi Ufa Bilim Merkezi Tarih, Dil ve Edebiyat Enstitüsü araştırmacıları tarafından insanların isteği üzerine hazırlanmıştır. Tabii ki, yeni şecereler açıklama metinleri içermemektedir ve sadece soy ağacından oluşmaktadır.

**Doç. Dr. Minlegali Nadergulov**

һәм Әйле ырыуы шәжәрәләренән өҙөктәр индергән. 1913-1914 йылдарҙа "Шура" журналы биттәрендә Әйле һәм Ҡырғыҙ ырыуы шәжәрәләренән өҙөктәр баҫыла. 1927 йыл "Башҡорт аймағы" журналының 4-се һанында Сәғит Мирас тарафынан Ҡыпсаҡ, Юрматы һәм Ҡара-Табын (Ирәкте) ырыуҙары шәжәрәләре нәшер ителә.

Башҡорт шәжәрәләре айырым йыйынтыҡ рәүешендә 1960 йылда донъя күрә. Тарихсы-этнограф Р. Ғ. Кузеев әҙерләп сығарған "Башҡорт шәжәрәләре" китабы фән белгестәре тарафынан юғары баһа ала һәм боронғо ырыу тарихтарын өйрәнеүгә киң юлдар аса.

Милли генеалогик яҙмаларҙың икенсе йыйынтығы 2002 йылда нәшер ителде. Р.М. Булгаков менән М. Х. Нәҙерғолов әҙерләп баҫтырған рус телендәге был китапҡа XIX-XX быуат башында күсерелгән 27 шәжәрәнең тексы индерелгән.

Уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителгән был өсөнсө йыйынтыҡ боронғо һәм хәҙерге шәжәрәләрҙең айырым үрнәктәренән тора. Боронғо шәжәрәләр ғәрәп графикаһындағы ҡулъяҙма ҡомартҡылар рәүешендә XIX-XX быуат баштарынан һаҡланып ҡалған, хәҙергеләре иһә һуңғы бер-ике йыл эсендә төрлө кешеләрҙең заказы буйынса Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары тарафынан әҙерләнгән. Тәбиғи, хәҙерге шәжәрәләр исемдәр теҙмәһенән (схеманан, ырыу йәки ара ағасынан) ғына тороп, һис ниндәй текст һәм аңлатмалар менән оҙатылмай.

**Миңлеғәли Нәҙерғолов**
**филология фәндәре кандидаты**

## Başkurt Şecereleri Hakkında

Başkurt aydınlarından Muhametselim Ümitbayev (1841-1907) *Yadigâr* adlı kitabında *"Başkurtlar şecereleri, yıldızları ve destanları bilmelidir"* demiştir. Hayatını bu söze uygun olarak geçiren bu bilim adamı, ömrünü kendi uruğunun soy ağacını ve tarihini öğrenmeye vakfetmiştir. Onun bu özlü sözü Başkurtların hakikaten kendi tarih ve şecerelerine ne kadar çok önem verdiklerini göstermektedir.

Dünya halklarının çoğu kendi soyunun ortaya çıkışını öğrenmeye çalışmış ve hâlâ çalışmaktadır. Başkurtlar da kesin tarihi belli olmayan eski zamanlardan başlayıp soy ağacı yapmaya başlamışlardır.

Reşideddin'in *Cami'üt-Tevarih* (XIV. yy.), Ebülgazi Bahadır Han'ın *Şecere-i Terakime* ve *Şecere-i Türk* (XVII yy.) adlı eserleri şecereler kullanılarak yazılmıştır.

Osmanlı Devletinde Hz. Muhammed soyundan gelenlerin, yani seyyidlerin soyağaçları *Nakibu'l eşraf* adı verilen bir makam tarafından tutulmuştur. Bu müessese yakın tarihlere kadar faaliyetini devam ettirmiştir. Soyağaçların çoğu rulo şeklinde ve kırmızı-siyah mürekkeple yazılmıştır. XVI. asırda şecere modası yaygınlaşmıştır, şecerelerin belli bir kısmı da tezhipli ve madalyonlu minyatürler halindedir. Bu tür yazma eserlere *Zübtetü't-Tevarih, Subhatu'l-Ahbar* ve *Silsile-name* denilmiştir. İstanbul, Edirne ve Konya'da bunları yapan atölyeler kurulmuş, ekoller oluşturulmuştur. Bunun gibi çalışmalara Mevlevi

## Башҡорт шәжәрәләре хаҡында

Башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев (1841-1907) "Ядкәр" исемле китабында башҡорттар шәжәрәһен, йондоҙҙарҙы һәм дастандарын белергә тейеш тигән. Әйткән һүҙҙәренә ярашлы итеп йәшәгән ғалим ырыуының шәжәрәһен һәм тарихын өйрәнеүгә күп көс һалған. Уның был һүҙҙәре башҡорттарҙың ысынлап та үҙ тарихына һәм шәжәрәләренә бик ҙур әһәмиәт биреүҙәрен күрһәтә.

Донъя халыҡтарының күбеһе үҙҙәренең сығышын өйрәнергә тырышҡан. Башҡорттар ҙа бик борондан башлап ырыуҙарының тарихын өйрәнгән, шәжәрәләрен төҙөгән. XIV быуатта Рәшеттәтдиндең "Жәмиг әт-тәуарих", XVII быуатта Әбүлғази Баһадир хандың "Шәжәрәи тәрәкимә" һәм "Шәжәрәи төрк" әҫәрҙәре шәжәрәләр ҡулланылып яҙылған.

Ғосманлы дәүләтендә Мөхәмәт пәйғәмбәр нәҫеленән килгән сәйеттәрҙең шәжәрәләрен "Накиб-ул' әшрәф" исемендәге ҡоролош теркәп барған. Был идара XX быуаттың баштарына хәтлем эшләп килгән. Шәжәрәләрҙең күбеһе рулон рәүешендәге ҡағыҙға ҡыҙыл-ҡара төҫ менән яҙылған. XVI быуатта Ғосманлы империяһында шәжәрә модаһы киң таралған булған һәм ҡайһы берҙәре биҙәкле медальон формаһындағы миниатюра һымаҡ эшләнгән. Бындай әҫәрҙәр "Зүбтәтү'т-тәуарих", "Сүбһәтү'ләһбар" һәм "Силсилә-намә" тип атала. Истанбул, Әдирнә, Конъя ҡалаларында

dergâhları da katılmıştır (Sadi Bayram, "Silsile-nameler ve İrlanda-Dublin, Chester Beatty Library'de Bulunan 1598 Tarihli Zübdetü't-Tevarih". *Vakıflar Dergisi*. 1994. s.52).

Prof. Dr. Sübidey Togan'ın izlenimlerine göre, Amerika Birleşik Devletleri'nde İncillerin arkasına aile fertlerinin doğum ve ölüm tarihleri kaydedilmekte ve bu kayıtlara dayanarak soy ağacı çıkarılmakta olduğunu öğrenmekteyiz. Aynı şekilde eski zamanlarda Başkurtlar da Kuran kitabının arkası ve kenarlarına buna benzer kayıt tutmuşlardır. Prof. Dr. İsenbike Togan'a göre, Türkiye'de de eskiden bu gelenek çok yaygındı.

## Ahmet Zeki Velidi Togan'ın şecereler hakkındaki görüşleri

Tanınmış tarihçi Ahmet Zeki Velidi Togan'ın *Tarihte Usul* kitabında şecerelerin gelişim tarihi anlatılmaktadır. Bu bilgilerin önemli olduğunu düşünerek *Şecereler (geneologie)* bölümünü kitaba alıntı olarak eklemek istedik:

Eski Yunanlılar Olimpia'da galip gelenlerin listelerini, keza Atina zadegânı Archonotlerin şecerelerini tertip ederlerdi. Roma'da da konsüllerin hükümet senelerini sonra da papaların papalık senelerini gösteren listeler bulundurmuşlardır. Bizde Osmanlı devrinde mülkiye memurlarının, vezirlerin, şeyhulislamların listesi tutulmuştur ki Katip Çelebi'nin *Takvim üt-tevarih*'ine eklenmiştir. Germen kavimlerinin zadegânı arasında da ensabın

уларҙы эшләүсе оҫтаханалар, мәктәптәр ҡоролған. Был эшкә мәүләүи тәриҡәтенең тәккәләре ла ҡатнашҡан (Sadi Bayram, Silsile-nameler ve İrlanda-Dublin, Chester Beatty Library'de Bulunan 1598 Tarihli Zübdetü't-Tevarih. Vakıflar Dergisi. 1994. S.52).

Профессор, доктор Сүбидәй Туған күҙәтеүҙәре буйынса, Америка Ҡушма Штаттарында Инжилдең аҙағына ғаилә ағзаларының тыуған һәм үлгән ваҡытын теркәү йолаһы йәшәп килә. Кәрәккән саҡта кешеләр был яҙмаларға таянып нәҫел ептәрен асыҡлай ала. Боронғо заманда башҡорттар ҙа Ҡөрьәндең аҙағына йә ситтәренә бындай мәғлүмәттәрҙе теркәгән. Профессор, доктор Иҫәнбикә Туған әйтеүенсә, элек Төркиәлә лә был йола киң таралған булған.

## Әхмәтзәки Вәлиди Туған шәжәрәләр тураһында

Шәжәрәләр тураһындағы мәғлүмәттәр тарихсы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың "Тарихта ысул" тигән китабында ла бирелгән. Түбәндә телгә алынған китаптың "Шәжәрәләр (генеалогия)" бүлеген килтерәбеҙ:

Боронғо гректар Олипмиала еңеүселәрҙең исемлек һәм Афина аҡһөйәктәре Анхонттарҙың шәжәрәләрен төҙөгәндәр. Римда консулдарҙың хөкөм һөргән йылдарын, һуңынан папаларҙың папалыҡ йылдарын күрһәткән документар тотҡан. Беҙҙә Ғосманлы дәүерендә дәүләт кешеләренең, вәзирҙәрҙең, шәйхелисламдарҙың исемлеге төҙөлгән һәм Кәтиб Чәләбинең "Тәҡүим үт-

zaptına ve şecerelerin tertibine ehemmiyet verilmiştir. Mamafih şecere tutmak usulü daha ziyade Şark kavimlerinin âdetidir. Bunlardan Moğol devrine ait ensap çok mazbuttur. Çengiz'in ecdadından ve ahfadının 1300 senesine kadarki şecerelerinin Reşideddin'in idaresine tertip edilen nüshası *Şu'bi Pencgâne* ismi ile maruf olmuşlardır, ki bazı yerleri Uygur harfleriyle yazılan [bu eserin] yegane nüshası Topkapı Sarayında (N.2937) bulunmaktadır. Bu eser Temürlüler devrinde *Mu'iz al-ansab* ismi verilerek 1426 (H. 830) senesine kadar getirilmiştir, sonra Hüseyin Baykara zamanında bir daha ilaveler yapılmıştır ki nüshaları Paris Milli Kütüphanesinde (anc. Fond Persan, N. 67) ve Londra'da British Museum'da (Rieu, *Catalogue of Persan manuscripts,* s.183) bulunmaktadır. Bu şecerelerde bazen ufak çocuklar, çocukken ölenler bile kaydedilmiştir ve çocukların anneleri ve bunların hangi kabileden geldikleri de zikredilmektedir. Bir de Topkapı Sarayında Baysungur Mirza'nın hat ve resim albümünde (hazine kısmı N. 2152) Temür'ün, selef ve haleflerin Uygur harfleri ile yazılmış şeceresi vardır ki Alangua ve Temür ve Şahruh dâhil olmak üzere birçokların resimleri de verilmiştir. Kazak urukları arasında yaşayan Çengiz oğulları bütün son asırlarda kendi ensap ve şecerelerini itina ile zapt etmişlerdir Bunları Kazaklardan Şahkerim ve Kazanlı Ahund Kurbanali neşretmişlerdir. Almanya'da şecereleri toplayan, onları muhafaza eden ve neşriyatta bulunan genealogie cemiyetleri vardır. Bunlardan "Gotha Cemiyeti" nin

тәуарих"ына индерелгән. Герман халыҡтарының аҡһөйәктәре араһында ла нәҫелдең теркәлеүенә һәм шәжәрәләрҙең төҙөлөүенә әһәмиәт бирелгән. Шулай ҙа шәжәрә төҙөү көнсығыш халыҡтарына хас бер ғәҙәт. Улар араһынан Монгол дәүеренә ҡараған нәҫел яҙмалары күп. Сынғыҙ хандың ата-бабалары һәм ейәндәренең 1300 йылына тиклемге шәжәрәләренең Рәшитәддин заманында төҙөлгән нөсхәһе "Ша'би пенжганә" исеме менән мәшһүр була. Уның ҡайһы бер өҙөктәре уйғур хәрефтәре менән яҙылған берҙән-бер нөсхәһе Төпҡапы һарайында (№2937) һаҡлана. Был әҫәр Тимерлеләр дәүерендә "Му'из әл-әнсәб" исеме менән 1426 (һижри 830) йылға тиклем килтерелгән, һуңынан Хөсәйен Байҡара ваҡытында өҫтәлмәләр эшләнгән варианты Париж милли китапханаһында (anc. Fond Persan, №67) һәм Лондондағы Британ музейында (Rieu, Catalogue of Persan manuscripts, s.183) һаҡлана. Был шәжәрәләрҙә бәләкәй балалар ҙа, хатта бала саҡта үлеп ҡалғандар ҙа теркәлгән һәм балаларҙың әсәләренең ниндәй ырыуҙан булыуҙары ла телгә алынған. Төпҡапы һарайында Байсунғур Мирзаның каллиграфия һәм рәсем альбомында (Хазина бүлеге, № 2152) Тимерҙең ата-бабалары һәм тоҡомдарының уйғур хәрефтәре менән яҙылған шәжәрәһе бар һәм араларында Алангуа, Тимер, Шаһруһтың һәм башҡаларҙың һүрәттәре төшөрөлгән. Ҡаҙаҡ ырыуҙары араһында йәшәгән Сыңғыҙ хан тоҡомдары ла һуңғы быуатҡа хәтлем шәжәрәләрен теркәп барғандар. Уларҙы ҡаҙаҡтарҙан Шаһкәрим һәм ҡаҙанлы ахун Ҡорбанғәли нәшер иткән. Германияла шәжәрәләрҙе

neşriyatı başta gelmektedir. "Gotha Saray takvim neşriyatı" ismini taşıyan bu dergi 1764'ten beri her sene çıkıyor. Yine Herald Cemiyeti tarafından neşredilmekte olan *Deutsches Geschlechtsbuch* şimdiye kadar 56 cilt çıkmıştır. Türkiye'de pek bol olan bu nevi ensap defterlerin cem ve zaptına itina edilmiştir (Ahmet Zeki Velidi Togan, *Tarihte Usul,* İstanbul. 1962. s. 53-54).

## Şecere kelimesi anlamı nedir?

Şecere kelimesi *ağaç* anlamını taşıyan Arapça kelimeden gelmekte ve birçok Türk halklarında *soy ağacı* manasında kullanılmaktadır. Bu kelime Türkiye Türkçesinde – *şecere*, Azerbaycanca – *şäcärä*, Başkurtça – *şäjärä*, Kazakça – *şäjirä*, Kırgızca – *sancıra*, Özbekçe – *şäcärä*, Tatarca – *şäcärä*, Türkmence – *şecere*, Uygurca – *şäjirä* şeklindedir *(Karşılaştırmalı Türk Lehçeleri Sözlüğü (Kılavuz kitap)* I. 1992. s 816). Başkurt dilinin açıklamalı sözlüğünde *şäjärä* sözünün Arapça köklü olduğu belirtilerek iki anlamı verilmiştir. Birinci anlamı belli bir soyun ortaya çıkışını, yayılmasını gösteren ve soy ağacı veya bu bilgileri içeren bir tür tarih yazımı, diğeri ise ağaç (*şäjärä ağacı* – soy aşacı, soy ağacı şeması)'tır. (*Başkort Telenen Hüzlege.* İke Tomda. Tom II. Moskova, 1993. S. 685).

Şecere sözü Başkurtlarda esas olarak soy ağacı manasında kullanılmaktadır. Ancak bu terim sadece bununla sınırlı değildir ve çok daha geniş bir anlama sahiptir. Başkurt şecereleri yazılış şekillerine ve içlerindeki bilgilere göre birbirinden farklı olabiliyor. Bazı şecereler sadece soy ağacı

йыйған, һаҡлаған һәм баҫтырған генеалогия йәмғиәттәр бар. Улар араһында Гота йәмғиәтенең нәшриәте алда бара. "Гота һарай календарь баҫмаһы" исемендәге журнал 1764 йылдан алып һәр йыл сығарыла. Тағы Һералд йәмғиәте сығарған "Deutsches Geschlechtsbuch" баҫмаһының әлеге көнгә ҡәҙәр 56 томы донъя күрҙе. Төркиәлә лә нәҫел дәфтәрҙәре бик күп. Уларҙы йыйыуға һәм теркәүгә ҙур иғтибар бирелә (Әхмәтзәки Вәлиди Туған, Тарихта ысул, Истанбул. 1962. 53-54 бит).

## Шәжәрә һүҙенең мәғәнәһе

"Шәжәрә" һүҙе ғәрәпсә ағас тигәнде аңлата.Күп кенә төрки телдәрендә нәҫел ағасы мәғәнәһендә ҡулланыла. Төрөксә – шәджәрә, азербайжанса – шәджәрә, башҡортса – шәжәрә, ҡаҙаҡса – шәжирә, ҡырғыҙса – санджыра, үзбәксә - шәджәрә, татарса – шәжәрә, төркмәнсә шежере, уйғырса – шәжирә тип әйтелә (Karşılaştırmalı Türk Lehşeleri Sözlüğü (Kılavuz kitap). I. 1992. s 816). Башҡорт теле һүҙлегендә "шәжәрә" һүҙенең ғәрәпсәнән килеүе һәм ике мәғәнәһе булыуы билдәрелгән. Беренсеһе, билдәле бер нәҫел-ырыуҙың килеп сығышын, таралышын күрһәткән генеологик яҙма, икенсеһе иһә ағас (шәжәрә ағасы, нәҫел-ырыуҙың тармаҡланып китеүен күрһәткән һыҙма) тип әйтелгән (Башҡорт теле һүҙлеге. Ике томда. Том II. Мәскәү, 1993. 685 б.)

Шәжәрә һүҙенең башҡортса төп мәғәнәһе, нәҫел-ырыуҙың тармаҡланып китеүен күрһәтеү өсөн ҡулланыла. Тик

içermektedir. Diğerlerinde ise vakayinameye yaklaşan tarihi bilgiler, rivayetler, tarihi vesika ve kitaplardan kopya edilmiş materyaller bulunmaktadır.

Göçebe halkların şecerelerinde geleneksel olarak sadece erkek tarafının bağları kaydedilmiştir. Başkurt soy ağacına sadece erkeklerin yazılması akademisyen Rail Kuzeev'e göre, ekzogami adetine bağlıdır. Başkurt urukları bazen birkaç parçaya ayrılmış ve bazen de aksine birleşmişlerdir. Bu durumda ekzogami prensibi soy ağacının doğru korunmasını sağlamıştır. Daha sonra bu geleneğin ilk amacı yanında, şecerelere olaylar ve rivayetler eklenmiş ve bunlar uruğun tarihini yansıtan belgeler haline dönüşmüştür (Kuzeev R.G., *Başkirskiye Şecere.* Ufa. 1960. s. 8.).

Bu durumu bir bilim kadınının aşağıdaki sözleri çok güzel bir şekilde ifade etmektedir: "Benim adım çocukken babamın şeceresinde yoktu, evlenirsem de eşimin şeceresine kaydedilmeyecektir. Yani şecerelere göre ben yokum". Ancak bazı Başkurt şecerelerinde kadınların isimlerini görebiliyoruz. Bunlar daha sonraki zamanlarda ortaya çıkmıştır.

"Şecere" kelimesinin Arapça anlamı "ağaç" olsa da eski şecerelerin çoğu çizgilerle birleştirilen halkalar şeklindedir. Bu şekildeki şecereler hem Anadolu'da, hem Orta Asya'da ve hem de İdil-Ural boyunda çok yaygın olmuştur. Reşideddin'in *Şu'bi Pençgane* adlı meşhur eserindeki ve Osmanlı devletinde ortaya çıkan *Sübhatü'l Ahbar* kitabındaki geneolojik şemalar böyle

бының менән генә сикләнмәй, киңерәк мәғәнәгә эйә. Сөнки башҡорт шәжәрәләре яҙылыуына һәм эсендәге мәғлүмәттәргә ҡарап бер береһенән айырылып тора. Бәғзеләре бары тик нәҫел шәжәрәһе ғенә булһа, башҡалары тарихи мәғлүмәт, риүәйәт, тарихи китап алынған материалдар менән тулыландырылған.

Күсмә халыҡтарҙың шәжәрәләрендә ғәҙәттә ир-ат ҡына яҙылған булған. Башҡорттарҙа ла ир-аттың ғына исеме яҙылыуы, академик Рәил Кузеевтың фекере буйынса, экзогамияға бәйле. Башҡорт ырыуҙары бер нисәүгә бүленә алған, ҡайһы берҙәре, киреһенсә лә, берләшә алған. Был ваҡытта ла экзогамия принцибы нәҫел бәйләнешен дөрөҫ итеп төҙөүҙе талап иткән. Һуңынан был йоланың төп маҡсаты үҙгәреп шәжәрәгә ваҡиғалар һәм риүәйәттәр өҫтәлеп ырыуҙың тарихын сағылдырған документҡа әүерелгән (Кузеев Р.Г., Башкирские шежере. Уфа. 1960. 8 б.).

Был ғөрөфтө бер ҡатын ғалимәнең әйткән һүҙҙәре ҡыҫҡаса ошо рәүештә асыҡлай: "Минең исемем бала саҡта атайымдың да, кейәүгә сыҡҡас иремдең дә шәжәрәһенә яҙылмаясаҡ". Шулай ҙа ҡайһы бер башҡорт шәжәрәләрендә ҡатын ҡыҙ исемдәре бирелгән. Был күренеш һуңғы заман барлыҡҡа килгән булһа кәрәк.

"Шәжәрә" һүҙенең ғәрәпсә мәғәнәһе "ағас" булһа ла, боронғо шәжәрәләрҙең күпселеге һыҙыҡтар менән тоташтырылған түңәрәктәр рәүешендә төҙөлгән. Был форма Анатолия, Урта Азия һәм Урал-Волга буйында

hazırlanmıştır. Başkurt şecerelerinin çoğu da bunun gibidir. Onların bazıları çizgilerle birleştirilen isimler listesi şeklindedir. Rail Kuzeev'in *Başkurt şecereleri* kitabının 264. sayfasında ağaç şeklinde yapılmış Kıpçak boyunun şeceresi yayınlanmıştır. Bu soy ağacı 1900 yılında Hasan Bayazitov tarafından yapılmıştır. Başkurdistan'da bu şekilde yapılan başka bir şecereye hiç rastlanmamaktadır. Sadece günümüzde hazırlanan bazı şecereler ağaç şeklinde yapılmaktadır. Bu yüzden soy ağaçlarının ağaca benzetilerek yapılması son dönemlerde ortaya çıkmıştır denilebilir.

## Tarih açısından şecerelerin önemi

Şecereler Başkurtlar tarafından yazılan en önemli Başkurt tarihi kaynaklardandır. Tabiî ki, onların çoğunda gerçek tarihi olaylarla birlikte mitolojiden, rivayetlerden alınan bilgiler de bulunmaktadır. R. Kuzeev tarafından 1960 yılında Başkurt şecerelerinin kitap olarak yayınlatılması XVII. asra kadar ki Başkurdistan tarihine kaynak açısından büyük katkı sağlamıştır. O zamana kadar o dönem kaynaklarında eksiklik hissedilmiştir.

Araştırmacılara göre, önce şecere geleneği sözlü olarak yaşamıştır. Sonra XV-XVI. asırlar civarında bazı boyların şecereleri büyüyünce ve hafızada tutulması zorlaşınca kâğıda geçirilmeye başlamıştır. Örneğin, Yurmatı uruğunun şeceresi Tetiges Bey tarafından anlatılmış Molla Baki tarafından kaydedilmiştir. Tetiges Bey hicri 972, miladi 1564-1565 yılında

киң таралған булған. Рәшетәддиндең "Шу'би пенжганә" исемле мәшһүр әҫәрендәге, Ғосманлы дәүләтендә барлыҡҡа килгән "Сүбһәтү'л-әһбар" китабындағы нәҫел-ырыу яҙмалары ла шулай эшләнгән. Башҡорт шәжәрәләренең күбеһе лә был шәкелдә яҙалған. Бәғзеләре һыҙыҡтар менән тоташтырылган исемдәр рәүешендә лә була. Башҡорттар араһында ағас рәүешендә эшләнгән ҡыпсаҡ шәжәрәһе бар. Ул Рәил Кузеевтың "Башҡорт шәжәрәләре" китабында басылған (264 б.). Был генеологик һыҙманы 1900 йылда Хәсән Баязитов эшләнгән. Быңдай формала эшләнгән шәжәрә башҡа бер ерҙә лә осрамай. Хәҙерге көндә төҙөлгән шәжәрәләрҙең ҡайһы берҙәре генә ағас шәкелендә эшләнә. Быға нигеҙләнеп генеологик ағас рәүешендә эшләү тик һуңғы замандарҙа ғына барлыҡҡа тип әйтергә була.

## Тарих өсөн шәжәрәләрҙең әһәмиәте

Шәжәрәләр – башҡортарҙың иң мөһим яҙыулы тарихи сығанаҡтарының береһе. Уларҙың күбеһендә булған хәлдәр менән бергә мифологиянан, риүәйәттәрҙән алынған мәғлүмәттәр ҙә теркәлгән. Р. Кузеев 1960 йылда башҡорт шәжәрәләрен китап итеп баҫтырыуы Башҡортостандың XVII быуатҡа ҡәҙәр тарихы буйынса сығанаҡтарҙы байытыуға ҙур ярҙам итә. Ул ваҡытҡа тиклем быңдай сығанаҡтар аҙ билдәле була.

Ғалимдар әйтеүенсә, шәжәрә йолаһы башта һүҙле булып йәшәп килә. Аҙаҡтан XV-XVI быуаттарҙа,

vefat etmiştir. Yani Yurmatıların şeceresi XVI. asrın ortalarında yazılmıştır (Kuzeev R.G. *Başkirskiye Şecere*. Ufa. 1960. s. 8.).

Tarihçi Ahmet Zeki Velidi Togan gençken Rusya'da bulunduğu zamanlarda (1913) meşhur aydınlardan Rizaitdin Fahretdinov tarafından yayınlatılan *Şura* dergisinde çıkan *Bürcen Başkurtları* adlı makalesinde Başkurt tarihini yazmak için diğer kaynaklarla birlikte Başkurt şecere ve rivayetlerinin incelenmesinin, Başkurtların gerçek tarihini öğrenmede, Başkurtları meydana getiren etnik gurupların açıklaması açısından önemli bir kaynak olduğunu vurgulamıştır.

## Şecereleri öğrenim tarihinden

Başkurtların soy ağaçları XVIII. asrın sonundan başlayıp Rus ve Başkurt araştırmacıların incelemelerinde kullanılmaya ve daha sonra yayınlatılmaya başlamıştır. XX. asrın başlarında bu konuyla ilgilenen Başkurtlardan Muhametselim Ümitbayev, Rizaitdin Fahretdinov gibi şahsiyetlerin çalışmaları önemlidir. Sovyet dönemi başlarında "Başkurdistanı Öğrenme Cemiyeti" üyeleri diğer konularla birlikte şecereleri de öğrenmeye çalışmışlardır.

XX. asrın ortalarında Başkurtların şecereleri daha da ciddi araştırmalara tabi tutulmuştur. 1960 yılında Rail Kuzeev tarafından Ufa'da Rusça *Başkurt Şecereleri* adlı kitap yayınlanmıştır. Bu kitapta toplam 25 şecerenin transliterasyon metni, çevirisi ve açıklamaları neşredilmiştir. Bu tarihten sonra XX. asrın sonuna kadar

ҡайһы бер ырыуҙарҙың шәжәрәләренең күләме ҙурая һәм уларҙы иҫтә тотоуы ҡыйынлаша. Шуның өсөн уларҙы ҡағыҙға теркәй башлайҙар. Мәҫәлән, юрматы ырыуының шәжәрәһе Тәтегәс бейҙең һөйләүе буйынса Баҡи мулла тарафынан яҙып алына. Тәтегәс бей һижри 972, милади 1564-1565 йылдар араһында вафат иткән. Йәғни, юрматы шәжәрәһе XVI быуаттың урталарында яҙыла (Кузеев Р.Г. Башкирские шежере. Уфа. 1960. 8 б.).

Тарихсы Әхмәтзәки Вәлиди Туған Рәсәйҙә йәшәгән осорҙа 1913 йылында күренекле ғалим Ризаитдин Фәхретдинов редакторлығында сығарылған "Шура" журналында баҫылған "Бөрйән башҡорттары" исемле мәҡәләһендә башҡорт тарихын дөрөҫ итеп яҙыу, башҡорттарҙың этник төркөмдәрен асыҡлау өсөн башҡорт шәжәрә һәм риүәйәттәренең мөһим сығанаҡ булыуын билдәләп үтә.

## Шәжәрәләрҙе өйрәнеү тарихынан

Башҡорт шәжәрәләре XVIII быуаттың аҙағынан башлап рус һәм башҡорт ғалимдарының тикшеренеүҙәренда ҡулланыла һәм һуңынан баҫыла башлана. XX быуаттың башында был теманы тикшереүсе башҡорт ғалимдары Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Ризаитдин Фәхретдинов һ.б. хеҙмәттәре мөһим. Совет осороноң тәү йылдарында Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәтенең ағзалары башҡа мәсьәләләр менән бергә шәжәрәләрҙе лә тикшерә башлай.

XX быуаттың уртаһында башҡорт

bu türlü büyük edisyon-kritik çalışmaları yapılmamıştır. Ancak şecere araştırmaları devam etmiştir. İlmi araştırmalarda ve dergilerde bazı şecereler yayınlanmış ve incelenmiştir.

1972 yılında Ufa'da Sovetler Birliği Bilimler Akademisi Eski Elyazmalar Araştırma Komisyonu'nun Güney Ural Şubesinin kurulması bu yöndeki çalışmaları teşvik etmiştir. Tarih, Dil ve Edebiyat Enstitüsü'nde kurulan Eski Elyazmalar Araştırma Grubu tarafından şecerelerin toplanması ve incelenmesi yapılmıştır. Başkurt şecereleri bu dönemde dil, edebiyat, etnografya, tekstoloji açısından incelenmeye alınmıştır. Soy ağacı yazmaları 6 ciltlik *Başkurt Edebiyatı Tarihi*'nde (Baş redaktörü ve *Şecereler* bölümünün müellifi Gaysa Hüseyinov), Reyse Halikova'nın *XVIII-XIX asır Başkurt Şecereleri ve Resmi Bilgilerinin Dili* kitabında ve çok sayıda yayınlanan edisyon-kritik araştırmalarda kullanılmıştır. Başkurdistan Bilimler Akademisi'nin asli üyelerinden olan Gaysa Hüseyinov'un şecereler hakkında araştırmaları ve bazı şecerelerin metinleri yayınlanmıştır. Bundan başka bu dönemde şecereler çok sayıda doktora tezinin malzemesi olarak da kullanılmıştır.

1998 yılında İşmuhamet Galyautdinov tarafından Eyli boyunun şeceresini içeren Tacetdin Yalçıgul'un *Tarih Name-i Bulgar* eseri dil açısından incelenmiş ve metinlerinin edisyon-kritik metni, Başkurtça ve Rusça çevirisi ile beraber kitap halinde neşredilmiştir.

шәжәрәләре етди рәүештә тикшереләбашлана. 1960 йылда Рауил Кузеев Өфөлә рус телендә "Башҡорт шәжәрәләре" исемле китабын баҫтырған. Был китапта бөтәһе 25 шәжәрәнең тексты, тәржемәһе һәм аңлатмалары нәшер ителә.

Был китап баҫылғандан һуң быуат аҙағына тилем быңдай ҙур текстологик хеҙмәт ҡабаттан баҫылмаһа ла, шәжәрә тикшереүҙәре дауам итә. Ғилми тикшереүҙәрҙә һәм журналдарҙа айырым шәжәрәләр донъя күрә.

1972 йылында Өфөлә Советтар Союзы Фәндәр академияһы археография комиссияһының Көнъяҡ Урал булексәһе ойошторолоуы шәжәрә тикшереүҙәрен дә көсәйтә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында барлыҡҡа килгән археография төркөмө шәжәрәләрҙе йыйыу һәм тикшереү эше менән шөғөлләнә. Башҡорт шәжәрәләре ул дәүерҙә тел, әҙәбиәт, этнография, текстология яғынан тикшерелә. Генеалогия яҙмалар 6 томлыҡ "Башҡорт әҙәбиәте тарихы"нда (баш мөхәрире һәм шәжәрәләр бүлеге авторы Ғайса Хөсәйенов), Рәйсә Халикованың "XVIII-XIX быуат башҡорт шәжәрәләре һәм рәсми документтарҙың теле" исемле китабында һәм күп һанда баҫылған археография һәм текстология тикшереүҙәрендә ҡулланыла. Башҡортостан Фәндәр академияһы ағзаһы Ғайса Хөсәйенов шәжәрәләр тураһында тикшереүҙәр һәм ҡайһы бер шәжәрәләрҙе баҫтыра. Бынан тыш был осорҙа шәжәрәләр бик күп докторлыҡ һәм кандидатлыҡ диссертацияһы өсөн материал булып ҡулланыла.

XX. asrın doksanlı yıllarında Kadim Aralbayev tarafından Membet uruğu şeceresi yayınlanmıştır. Günümüzde şecerelere Minligali Nadergulov ve Ramil Bulgakov'un önem vermeye başladıklarını söyleyebiliriz. M. Nadergulav tarafından 1993-1994 yıllarında *Agidel* dergisinde Yurmatı, Karagay-Kıpçak, Üsergen-İrekti uruklarının şecereleri yayınlatılmıştır. Aynı zamanda Rail Kuzeev, *Başkurt Soy Ağaçları* projesini hazırlamış ve Minligali Nadergulov ile Ramil Bulgakov'u da projeye katılmaya davet ederek Başkurdistan Cumhurbaşkanı Murtaza Rahimov'tan projeyi desteklemesi talebinde bulunmuştur. Cumhurbaşkanının desteği ile proje üzerindeki çalışmalar başlatılmıştır. O zamanlarda biz de R. Kuzeev tarafından bu projeye katılmak için davet edilmiştik. Maalesef, katılma imkânımız olmadı. Proje çalışmaları sırasında 1997 yılında adı geçen araştırmacı Ramil Bulgakov ile birlikte Muhametselim Ümitbayev tarafından hazırlanan Yumran-Tabın volosı (ilçesi) soyağacı ayrı kitap olarak neşredilmiştir. Bunun dışında bazı inceleme sonuçlarını yansıtan makaleler de ortaya çıkmıştır. 2000 yılında Başkurt şecereleri projesinin başkanı R. Kuzeev ciddi bir hastalığa yakalanmıştı. Bundan dolayı projelendirilen çalışmalar sonuçlandırılamamıştır. 2002 yılında Başkurdistan'ın başkenti Ufa'da Bütün Dünya Başkurtları Kurultayın toplanması dolayısıyla M. Nadergulov ve R. Bulgakov tarafından hazırlanan malzemelerin Rusça kısmı *Kitap* yayınevi tarafından

1998 йылында Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов Әйле ырыуының шәжәрәһе эсендә булған Тажетдин Ялсығолдоң "Тарих намә-и Болғар" исемле әҫәре тел яғынан тикшерелә һәм тексы башҡортса һәм русса тәржемәһе китап итеп нәшер ителә.

XX быуаттың 90-сы йылдарында Ҡәҙим Аралбаев мәмбәт ырыуы шәжәрәһен баҫтыра. Был ваҡытта Миңлеғәли Нәҙерғолов менән Рәмил Булгаков та был темаға тағы ла ҙурыраҡ әһәмиәт бирә башлай. М.Нәҙерғолов 1993-1994 йылдарҙа "Ағиҙел" журналында юрматы, ҡарағай-ҡыпсаҡ, үҫәргән, ирәкте ырыуҙарының шәжәрәләрен баҫтыра. Шул уҡ ваҡытта Рауил Кузеев "Башҡорт шәжәрәләре" проектын әҙерләй һәм Миңлеғәли Нәҙерғолов менән Рәмил Булгаковты ҡатнашырға саҡыра. Проектты тормошҡа ашырыу өсөн ярҙам итеүен һорап Башҡортостан президенты Мортаза Рәхимовҡа мөрәжәғәт итә. Президенттың хуплауы менән проект өҫтөндә эш башлана Ул ваҡытта Р.Кузеев мине лә был проектҡа ҡатнашырға саҡырғайны. Үкенескә, ул ваҡытта проекттарына ҡушылыу мөмкин булманы. Проект өҫтөндә эшләү ваҡытында Рәмил Булгаков менән Миңлеғәли Нәҙерғолов 1997 йылда Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев тарафынан әҙерләгән Йомран-Табын волосы шәжәрәһен айырым китап итеп нәшер итә. Бынан башҡа тикшереү һөҙөмтәләре айырым мәҡәләләр рәүешендә лә баҫыла. 2000 йылында

yayınlanmıştır. *Başkirskiya Rodoslovnıye* adı altında neşredilen bu kitap 27 Başkurt şeceresini içermektedir. Yayınlanan belgeler, Rail Kuzeev'in *Başkurtların Ortaya Çıkışı* adlı kitabındaki gibi Başkurtları yaşadıkları coğrafi bölgelere göre ayırarak incelenmiştir (a.g.e. s. 24): Güney-Doğu, Kuzey-Doğu, Güney-Batı ve Kuzey-Batı Başkurdistan Şecereleri.

## Türkiye'de yayınlanan Başkurt Şecereleri

Türkiye Kültür ve Turizm Bakanlığı tarafından yürütülen *Başlangıcından Günümüze kadar Türkiye Dışındaki Türk Edebiyatı Antolojisi* projesinin iki (29-30) cildi Başkurt edebiyatına ayrılmıştır. 2004 yılında yayınlanan 29. cildindeki Rusya dönemi edebiyat bölümünde Yurmatı, Karagay-Kıpçak, Üsergen ve Membet Boyları olmak üzere 4 Başkurt şeceresinin Latin harfleriyle yapılmış transkripsiyonu ve Türkiye Türkçesine çevirisi yayınlanmıştır. Bu kitapta Türkiye'de Başkurt şecereleri ilk defa yayınlanmıştır.

## Bugünkü Başkurtlar için şecereler neden önemli

Türk bilim adamlarından Hikmet Tanyu, Türkiye'de yaşayan tanınmış muhacir Başkurt bilgini Abdulkadir İnan'ın hayatını anlatırken onun bütün Başkurtlar gibi şecerisini iyi bildiğini söylemiştir (Hikmet Tanyu, Professor Ebdelkadir İnan. *Agizel.* 1994. No: 2. S.149). A.İnan hatıralarında da kendisinin soy ağacını bu şekilde vermekmedir: Bikkul – Gaziböri – Gabdelcelil

"Башҡорт шәжәрәләре" проектының етәксеһе ҡаты ауырыуға дусар була. Шуның өсөн проектланған эштәр аҙағына тиклем еткерелмәй. 2002 йылында Башҡортостандың башҡалаһы Өфөлә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәрелеүе сәбәбле М.Нәҙерғолов һәм Р.Булгаковтың әҙерләгән мәғлүмәттәрҙең русса бүлеге "Китап" нәшриәтендә көн күрә. "Башкирские родословные" исемле был китапҡа 27 башҡорт шәжәрәһе баҫыла. Нәшер ителгән материалдар Р.Кузеевтың "Происхождение башкирского народа" китабында ҡулланылған башҡорттарҙы йәшәгән урындарына бәйләп дүрт группаға айырып тикшереү принцибына нигеҙләнеп бүленә (24 б.): Көньяҡ-Көнсығыш, Төньяҡ-Көнсығыш, Көньяҡ-Көнбайыш һәм Төньяҡ-Көнбайыш Башҡортостан шәжәрәләре.

## Төркиәлә баҫылған башҡорт шәжәрәләре

Төркиә мәҙәниәт һәм туризм министрлығының "Барлыҡҡа килеүенән алып бөгөнгө көнгә тиклемге Төркиә тышындағы төрки халыҡтары әҙәбиәте антологияһы" проектының ике томы (29-30) башҡорт әҙәбиәтенә бағышланған. 2004 йылда донъя күргән 29-сы томында "Рәсәй дәүере әҙәбиәте" бүлегендә юрматы, ҡарағай-ҡыпсаҡ, үҫәргән һәм мәмбәт ырыуҙарының шәжәрәләре латин хәрефтәре менән башҡортса һәм төрөксәгә тәржемәһе бирелгән. Башҡорт шәжәрәләре Төркиәлә беренсе тапҡыр был китапта баҫылды.

– Süleyman – Muzaffer – Abdulkadir (Fethilkadir) (İnan Ebdelkadir, Törkiyege Kilgenden Aldağı Tormoşomdan Beğze Hetireler. *Agizel.* 1994. No: 1. S. 85).

Gerçekten Başkurtlar için şecereler büyük önem taşımaktadır. Son zamanlarda unutulmaya yüz tutan şecerelerin yeni şekilleri ortaya çıkmaya başladı. Rusya Bilimler Akademisi Ufa Bilim Merkezi Tarih, Dil ve Edebiyat Enstitüsü uzmanları tarafından arşiv araştırmaları yapılarak tarihi belgelere dayanılan soy ağaçları düzenlenmektedir. Okuyucu bunların bazı örnekleri ile bu kitapta da tanışabilecektir.

Yine Başkurdistan'da 2006 yılında resmi olarak Şecere Bayramları yapılmaya başlandı. Ana amacı eski geleneklerin korunması, kuşaklar arası bağların sağlanması, milli kültürün geliştirilmesi ve yeni nesillere aktarılması olan bu etkinlik içerisinde soy ağaçları yapılmakta, "Benim Kalem Ailem", "Halkımın Oyunları" gibi yarışmalar düzenlenmektedir. "Benim Kalem Ailem" etkinliğinde bir soyu temsil eden ailenin tüm kuşaklarından oluşan gruplar yarışmaktadır. Böylece Şecere bayramları çok coşkulu ve neşeli geçmektedir.

## Transliterasyon ve çeviri hakkında

Bu kitapta 6 adet eski, 7 adet yeni şecere Türkçe çevirileriyle yer almakta olup ayrıca 5 eski şecerenin de örnekleri yayımlanmaktadır. Eski şecerelerin Başkurtçası için günümüzde Başkurdistan'da kabul edilmiş Kiril harfli çağdaş Başkurt transliterasyon sistemlerinden biri kullanılmıştır. Bu çalışmamızda bugünkü edebi Başkurt

## Шәжәрәләрҙең хәҙерге көндәге әһәмиәте

Төрөк тикшеренеүсеһе Хикмәт Танйу Төркиәлә йәшәгән башҡорт ғалимы Әбделҡадир Инан тураһында: "Бөтә башҡорттар кеүек үк, ул үҙ шәжәрәһен яҡшы белә ине", – тигән (Танйу Хикмәт, Профессор Әбделҡадир Инан. Ағиҙел. 1994. № 2. 149 бит). Ысынлап та, Ә.Инан ғилми хеҙмәттәрендә үзен халыҡ йолаларының белгесе итеп таныта һәм хәтирәләрендә шәжәрәһен түбәндәгесә бирә: Биккол – Ғазибүре – Ғәбделйәлил – Сөләймән – Мозаффар – Әбделҡадир (Фәтхелҡадир) (Инан Әбделҡадир, Төркиәгә килеүҙән алдағы тормошомдан бәғзе хәтирәләр. Ағиҙел. 1994. № 1. 85 бит).

